VI Всероссийский фестиваль методических разработок
"КОНСПЕКТ УРОКА"
сентябрь - декабрь 2015 года

*Юмалина Минзия Рашатовна*

*муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение лицей с. Булгаково муниципального района Уфимский район Республики Башкортостан*

# *КОНСПЕКТ УРОКА ПО БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ В 7КЛАССЕ НА ТЕМУ: “ҠУМЫҘ МОҢОНДА –ХАЛҠЫМ ТАРИХЫ. ТЕРКӘҮЕСТӘР ТЕМАҺЫН НЫҒЫТЫУ”*

**Тема: Ҡумыҙ моңонда - халҡым тарихы. Теркәүестәр темаһын нығытыу.**

**Маҡсат:** 1)уҡыусыларҙың башҡорт музыка ҡоралдары тураһында алған белемдәрен киңәйтеү, Р.Заһретдинов ижады менән танышыу, теркәүестәр темаһын нығытыу.

2) уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын байытыу, телмәр, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.

3) башҡорт музыка ҡоралына ҡыҙыҡһыныу, ҡубыҙсыларға ихтирам, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** проектор, экран, видеояҙма “Ҡумыҙ моңо”, карточкалар, тест һорауҙары.

**Дәрес барышы:**

**1.Ойоштороу мәле.**

-Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ултырығыҙ.

**2. Психологик комфорт тыуҙырыу.**

-Бөгөнгө дәресебеҙ ғәҙәти түгел - беҙгә бөгөн бик күп ҡунаҡтар килгән. Кәйефтәребеҙ шәп, күңелдәребеҙ көр булһын өсөн, бер – беребеҙгә яҡшы

теләктәр менән дәресебеҙҙе башлайыҡ. Дәресебеҙҙең темаһын асыҡлар өсөн кроссворд сисеп алайыҡ.

**2. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу (дәрестең темаһын һәм маҡсатын асыҡлау).**

1) Башҡортостан флагындағы төҫ (Аҡ).

2) Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы (ҡурай).

3) Башҡортостандағы иң бейек тау түбәһе (Ямантау).

4) Башҡортостандағы йылға исеме (Ыҡ).

5) Бейә һөтөнән эшләнгән эсемлек (ҡымыҙ).

-Вертикаль бағанала ниндәй һүҙ килеп сыҡты? (ҡумыҙ)

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | А | Ҡ | | | | | |
| | | | Ҡ | У | Р | А | Й | | |
| | | | Я | М | А | Н | Т | А | У |
| | | | | Ы | Ҡ | | | | |
| Ҡ | Ы | М | Ы | Ҙ | | | | | |

-Ә нимә ул ҡумыҙ? (башҡорт халҡының музыка ҡоралы).

- Уҡыусылар, бөгөн беҙ дәрестә нимә тураһында һөйләшербеҙ?

-Башҡорт халҡының музыка ҡоралы –ҡумыҙ тураһында һөйләшербеҙ, Р.Заһретдиновтың ижады менән танышырбыҙ, тағы ла теркәүестәр темаһын нығытырбыҙ.

**3. Уҡыу мәсьәләһен хәл итеү.**

- Хәҙер дәфтәрҙәрҙе асып, бөгөнгө число һәм теманы яҙып китәйек.

а) артикуляцион күнегеү.

- Бөгөн ҡ өнөн ҡабатлайбыҙ. Әйҙәгеҙ, бөтәбеҙ бергә ҡ өнөн әйтәйек. Нисек әйтәбеҙ? (ҡаты итеп).

б) экранда тиҙәйткес.

- Әйҙәгеҙ тиҙәйткесте уҡып алайыҡ.

Ҡалын ҡарҙа ҡара ҡарға

Ҡарҡылдап китеп бара.

-Ошо тиҙәйткестән ҡ өнөнә булған һүҙҙәрҙе табып китәбеҙ.

(Ҡалын, ҡарҙа, ҡара, ҡарға, ҡарҡылдап).

в) шиғыр өҫтөндә эш.

-Хәҙер шиғыр уҡып алайыҡ.

Ҡурайҙы мин яҡшы беләм,

Ағайым уйнай гелән.

Бейетйп тә, йырлатып та

Була ул ҡурай менән.

(Уҡытыусы уҡый, 1-2 бала ҡысҡырып уҡый).

-Шиғырҙан башҡорт теленең  үҙенсәлекле өндәре булған һүҙҙәрҙе табып уҡыйыҡ әле. (ҡурайҙы, беләм, ағайым, гелән, бейетеп тә, ҡурай менән).

- Уҡыусылар, был шиғырҙа ниндәй теркәүестәр бар? (та, тә).

- Теркәүестәр ниндәй ҙур ике төркөмгә бүленә? (теҙеү – сочинительные, эйәртеү -  подчинительные).

- Та, тә теркәүестәре ниндәй төркөмгә ҡарай? ( теҙеү теркәүестәре).

г) карточкалар менән эш.

- Хәҙер ошондай эш бирелә. Мин һеҙгә һөйләмдәр яҙылған карточкалар таратам. Һеҙ шул һөйләмдәрҙән дәфтәргә теркәүестәрҙе табып яҙығыҙ.

1.Әсә йөрәге – иң тоғро  һәм һиҙгер йөрәк, балаға булған мөхәббәт хисе унда бер ҡасан да һүрелмәй, балаһының яҙмышына ҡағылған бер генә нәмәне лә  әсә йөрәге вайымһыҙ үткәрә алмай.  Йылмайыу кешене биҙәп кенә ҡалмай, ә уның ғүмерен оҙайта, шуға күрә йышыраҡ йылмайығыҙ.

2. Дамир кис буйына китабын ҡулынан да төшөрмәй уҡыны, тик таҡта янына һөйләргә сығыу менән, һөйләй алмай торҙо. Ҡар аҫтында ла, боҙ өҫтөндә лә йәшәү тынып ҡалған һымаҡ. Концертҡа ололар ҙа, балалар ҙа килгәйне.

**4. Уҡытыусының һүҙе.**

- Уҡыусылар, һеҙ ниндәй башҡорт халҡының музыка ҡоралдарын беләһегеҙ? (ҡурай, ҡумыҙ

Ҡумыҙ – башҡорт халҡының музыка ҡоралы. Уны Европала, Алыҫ Көнсығышта, Көньяҡ Америкала, бик күп төрки халыҡтарында ла осратырға мөмкин. Тик төрлө ерҙә аталышы төрлөсә. Мәҫәлән, сыуаштар уны – ҡапас, үзбәктәр  чанг – кобуз, украиндар –дрымба, итальяндар – иренле арфа тип йөрөтә. Тәүге ҡумыҙҙы ағастан һәм һөйәктән эшләгәндәр. Ә еҙ, баҡыр ҡумыҙҙарҙы кешеләр металл таба башлағас эшләгәндәр. Беҙҙең республикала ҡумыҙ бөгөн дә төрлө смотр, концерт, конкурстарҙа киң ҡулланыла. Ҡумыҙҙы профессиональ кимәлдә уйнаусылар ҙа бар.

-Һеҙ ниндәй танылған ҡумыҙсылар, ҡурайсыларҙы беләһегеҙ?

-Ҡумыҙсылар – Роберт Заһретдинов, Миңлеғәфүр Зәйнетдинов.

Ҡурайсылар – Йомабай Иҫәнбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Азат Айытҡолов, Роберт Юлдашев, Рәсүл Ҡарабулатов.

**5. Дәфтәрҙә эш.**

-Әйҙәгеҙ слайдтан ҡумыҙсы, ҡурайсылар исемлеген уҡып китәйек.

-Дәфтәргә ҡумыҙсы, ҡурайсылар исемлеген күсереп яҙып алайыҡ.

**6. Текст өҫтөндә эш**.

- Уҡыусылар. Р. Заһрединовтың эшмәкәрлеге айырым туҡталып үтеүгә лайыҡ. Дәреслектә уның тураһында текст бирелгән. Яңы һүҙҙәр менән танышып китәйек.

**а)һүҙлек эше:**

-отоп ала – запоминает

-иң элек – в первую очередь

-уратып ала- окружают

-оҡшатып уйнарға – играть подражая

-алтын ялатылған – позолоченный

**б) тексты уҡыу**

**в) йөкмәткеһе өҫтөндә эш:**

-Р.Заһретдинов кем ул? (ҡумыҙсы, ҡурайсы, өҙләүсе, уҡытыусы, ҡумыҙ яһаусы).

Ул ҡайҙа тыуған?

Ҡумыҙ менән мауығыу ҡасан башлана?

**г) видеояҙма тыңлау: Роберт Заһретдинов “Уралда тәбиғәт тауышы”.**

**д) 114 –се күнегеү өҫтөндә эш:**

-Һөйләмдәрҙе тейешле хәрефтәр һәм теркәүестәр өҫтәп күсереп яҙығыҙ.

Ҡ.мыҙ.а у.нау – тештәр өс.н яҡш. гимнастика, (..) ул т.штәрҙе нығыта, (...) тын юлдарын ки.әйтә. (...) физик (...) психологик торошҡа тәьҫир итә: барма.тар.а нервылар әүҙемләшә (...) һа.лыҡҡа я.шы тәьҫир итә.

(тикшереү – эштәрҙе алышып тикшереү ).

Ҡумыҙҙа уйнау – тештәр өсөн яҡшы гимнастика, шуға ла ул тештәрҙе нығыта, йәнә тын юлдарын киңәйтә. Шулай уҡ физик һәм психологик торошҡа тәьҫир итә: бармаҡтарҙа нервылар әүҙемләшә һәм һаулыҡҡа яҡшы тәьҫир итә.

**7. Тест һорауҙары.**

- Уҡыусылар, бөгөн дәрестә беҙ нимә тураһында һөйләштек? Ниндәй яңылыҡтар белдегеҙ? Шул һораузарға яуап биреп , үҙебеҙҙең белемебеҙҙе тикшерәйек.

1. Ҡайһы бер төрки халыҡтарында сиртеп уйнай торған оҙон тотҡалы ҡыллы музыка ҡоралы.

а) думбыра;

б) дөңгөр;

в) мандолина.

2. Тынлы музыка ҡоралы?

а) дөңгөр;

б) һорнай;

в) ҡумыҙ.

3. Был музыка ҡоралы урманда, ҡырҙа үҫә?

а) ҡумыҙ;

б) дөңгөр;

в) ҡурай.

4.Ҡайһы районда ҡурайға һәйкәл ҡуйылған?

а) Хәйбулла;

б) Белорет;

в) Баймаҡ.

5. Йомабай Иҫәнбаев кем?

а) сәсән;

б) ҡурайсы;

в) ҡумыҙсы.

6. Сәсәндәрҙең айырылмаҫ юлдашы?

а) думбыра;

б) ҡумыҙ;

в) мандолина .

7. Кем ул Роберт Заһретдинов?

а) ҡурайсы

б) ҡумыҙсы

в)баянсы

г) бейеүсе.

Яуаптар:

1. А, 2. Б, 3. В., 4. В, 5. Б, 6. А, 7.Б.

**8.Өй эше. Баһалау.**

-Өйгә эш : һеҙ шиғыр яҙып ҡарарһығыҙ. Рифмалашҡан һүҙҙәр ошо:

...................... ҡыҙ,

....................... ҡумыҙ.

....................... сиртә,

....................... китә.

**9. Йомғаҡлау. Дәрескә рефлексия.**

-Бөгөн дәрестә бик әүҙем ҡатнашып ултырҙығыҙ. Дәресте йомғаҡлап китәйек.Дәрестә бөгөн нимә белдегеҙ? Нимәгә өйрәндегеҙ? Дәрес оҡшанымы? Дәресте ошондай шиғыр юлдары менән тамамлайыҡ:

Халҡым минең, ҡумыҙ тартып
Башҡорт моңон көйләне.
Бөтөнөһөн төшөндөрөп,
Ил тарихын һөйләне.